МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

*Ата-әсәләр өсөн консультация:*

# " Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә дидактик уйындарының әһәмиәте"

**Тәрбиәсе:**
**Тулыбаева Г.Ғ.**

**Сибай**

# Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә дидактик уйындарының әһәмиәте

Бала саҡ уйындан, уйын бала саҡтан айырылғыһыҙ. Күп ваҡыт ололар уйынды бары тик күңел асыу сараһы тип кенә баһалаусан, ә балалар өсөн иһә ул – тотош бер донъя.

Л.С.Выготский билдәләүенсә, уйын шәхес үҫеше сығанағы булып тора һәм унының яҡын аралыҡта үҫешенә шарттар тыуҙыра: “Бала уйын эшмәкәрлеге аша үҫә. Тик ошо мәғәнәлә генә уйын баланың төп эшмәкәрлеге тип һанала ала, йәғни уйын баланың үҫеш кимәлен билдәләү ролен үтәй”.

А. Н. Леонтьев төп эшмәкәрлекте түбәндәгесә аңлата: “Төп эшмәкәрлек тип, ошо эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә баланың психик үҫешендә ғәйәт ҙур үҙгәрештәрҙең барлыҡҡа килеүе һәм унының яңы үҫеш кимәленә күтәрелә алыуына булышлыҡ итеүсе эшмәкәрлек атала”

Бала - саға уйындары шатрлыса ике ҙур төркөмгә бүленә:

- Сюжетлы-ролле уйындар
- Ҡағиҙәле уйындар

Сюжетлы-ролле уйындар башлыса көндәлек көнкүреш һәм йәмғиәт күренештәренә, төҙөлөш һәм төрлө ҡоролмалар менән эш итеүгә бәйле була, тәбиғи материалдар менән уйын ҡороуҙы, күңел асыуҙы һәм театрлаштырылған уйындар уйнауҙы үҙ эсенә ала.

Ҡағиҙәле уйындарға дидактик уйындар (предметтар һәм уйынсыҡтар менән уйнау, һүҙле дидактик уйындар, баҫма-өҫтәл уйындары, йырлы-көйлө музыкаль уйындар) һәм хәрәкәтле (сюжетлы, сюжетһыҙ, спорт элементтары менән башҡарылған) уйындар инә.

Һәм беҙ бөгөн шул уйындарҙың береһе - дидактик уйын тураһында һөйләшеп китәсәкбеҙ.

Дидактик уйын – ул ниндәй уйын?

Белеүебеҙсә, дидактик уйын – ул ҡағиҙәле уйындарға инә һәм уйын аша берәй нимәгә уҡытыу, өйрәтеү маҡсатын ҡуя. Улар дидактик уйындарға һәм хәрәкәтле уйындарға бүленә.

Дидактик уйындар өйрәтеүсе уйындар булып һанала. Дидактик уйындың төп маҡсаты булып өйрәтелгән күнекмәләрҙе, эш-хәрәкәттәрҙе нығытыу, баланың аҡыл-зиһенен, донъяны танып белеү һәләтен үҫтереү тора.

Һәр дидактик уйындың маҡсаты, уйын хәрәкәте һәм уйын ҡағиҙәләре була.

Дидактик уйын – ойоштороу эшмәкәрлегә һәм шулай уҡ үҙ аллы уйын эшмәкәрлеге лә тип һанала ала. Ойоштороу эшмәкәрлеге булараҡ, улар бөтә төр эшмәкәрлектә лә ҡулланыла. Тирә-йүн менән таныштырыуу, ябай математик төшөнсәләрҙе формалаштырыу, телмәр үҫтереү, музыкаль тәрбиә биреү эшмәкәрлектәрендә дөйөмләштереү, сағыштырыу, баланың белем кимәлен билдәләү һәм өйрәнелгән материалдарҙы нығытыу маҡсатында дидактик уйындар әүҙем ҡулланыла. Мәҫәлән, тирә-йүн менән таныштырыу эшмәкәрлегендә: “Сәскәләр менән күбәләктәр”, “Төҫлө ҡапсыҡтар”, “Нимәгә кәрәк” һ.б., башланғыс ябай математик төшөнсәләр эшмәкәрлектәрендә: “Пирамидалар”, “Ошондай уҡ формалағы предметты тап”, “Күршеһен әйт” һ.б., ә музыкаль биреү биреү эшмәкәрлегендә: “Ниндәй музыка ҡоралы”, “Ҡырҡылған һүрәтте төҙө” һ.б. уйындарҙы уйнатырға була.

Үҙ аллы уйын эшмәкәрлеге булараҡ, дидактик уйындар ойоштороу эшмәкәрлегенән тыш ваҡытта ҡулланыла. Был осорҙа ла педагогтың уйында ҡатнашыуы ҙур роль уйнай.

Дидактик уйындарҙы төрлөсә ойоштороорға була: мәҫәлән, педагог ойоштороу эшмәкәрлектәрендә дидактик уйынды нисек уйнарға, уйын ҡағиҙәләре һәм уйын барышында башҡарыласаҡ эш-хәрәкәттәр менән таныштырһа, режим ваҡытынын икенсе яртыһы ваҡытында ул үҙе уйында ҡатнашыусы булып йәки уйын ҡағиҙәләренең үтәлешен баһалаусы ролен башҡара. Шул уҡ ваҡытта кескәйҙәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрен ҡулайлай.

Ҡағиҙәле уйындарҙы ойоштороу эше өс этаптан тора:

- уйынды алдан әҙерләү;
- уны ойоштороп балаларҙы уйнатыу;
- уйындың һөҙөмтәһен баһалау;

Әҙерлек этабына түбәндәгеләр инә: баланың йәш үҙенсәләгенә һәм уйынды уйнатыу ваҡытына ҡарап уйынды һайлау; уйынды уйнатыу урынын билдәләү

(төркөмдә, саф һауала); уйнаусылар һанын билдәләү (бөтә төркөм балалары менән, өс-дүрт баланан торған төркөмсә менән, айырым бер бала менән); уйынды үткәреү өсөн кәрәкле дидактик материалдар (уйынсыҡтар, уйын кәрәк-ярағтары, тәбиғи материалдар) һайлау.

Уйындың ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булып үтеүенә ололарҙың әҙерлеге генә түгел, шулай уҡ балаларҙың да уйнау өсөн кәрәкле кимәлдә белемдәре, теге йәки был күренештәр, тормоштағы хәл-ваҡиғалар тураһында төшөнсәләре формалашҡан булырға тейеш.

Тәрбиәсе һәр ваҡыт уйын алдынан балаларҙы уның эстәлеге, уйын кәрәк-ярағтары менән таныштыра. Шунан уйын ҡағиҙәләрен һәм уйнау хәрәкәттәрен асыҡ һәм аңлайышлы итеп аңлатып, күрһәтеп бирә.

Тәрбиәсенең уйында ҡатнашыу дәрәжәһе балаларҙың йәш кимәленә, уларҙың уйнау әҙерлегенә һәм һәләтлелегенә, дидактик уйын маҡсаттарының һәм ҡағиҙәләрҙең ҡатмарлылығына бәйле. Педагог уйында ҡатнашып, балаларҙың башҡарған эш-хәрәкәттәрен күҙәтә, кәрәк ваҡытта төҙәтмәләр индерә, аңлата, төшөндөрә, күрһәтә һәм бергәләп башҡара.

Уйындың һөҙөмтәһен баһалау – уйын ойошторғанда иң мөһим сараларҙың береһе. Тәрбиәсе кем ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәп уйнаған, әүҙемлек һәм зирәклек күрһәткән, тиҫтерҙәре менән матур мөнәсәбәттәр һаҡлап уйнаған – шул балаларҙы маҡтап телгә ала. Уйынға баһа биреү – уны тағы ла йәнлерәк, ҡыҙыҡлыраҡ, күңеллерәк, бөтә балаларҙы ла йәлеп итеп ойоштороу юлдарын табыу маҡсатында үткәрелә: уйын барышында ҡуйылған маҡсаттарҙың ҡайһынығы үтәлде, ниндәй етешһеҙлектәр һәм ҡаҙаныштар булды, ни өсөн шулай килеп сыҡты һ.б. – тәрбиәсе ошоларҙың бөтәһен дә балалар менән ентекләп тикшерергә тейеш. Бындай сара уйынды алдан ныҡлап әҙерләүгә ярҙам итә, кескәйҙәрҙең үҙ-үҙен тота белеүен нығыта һәм уларҙың шәхси үҙенсәлектәрен яҡшы яҡтан үҫтерергә һәм киләсәктә уйын барышында быларҙың бөтәһен дә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтә.

Белеүебеҙсә, дидактик уйындар йәш үҙенсәлектәренә ҡарап ҡатмарлаша бара. Мәҫәлән, кескәйҙәр төркөмөнә тәҡдим ителгән уйындар: “Сәскәләр һәм күбәләктәр”, “Нимә юҡ булды?”, “Нимәнең тауышы?”, “Төҫлө ҡапҡастар”, “Кемдә нимә?” һ.б.. Икенсе кескәйҙәр төркөмөндә: “Ҡайҙа нимә үҫә?”, “Урманда

нимә йәшәй?”, “Балаçты яма”, “Дүртенсе артыҡ” һ.б.. Уртансылар төркөмөндә: “Нимәгә кәрәк?”, “Мин тәҙрә аша нимә күрәм?”, “Йәшелсәләр, емештәр”, “Серле һүрәттәр” һ.б. Өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәрендә: “Киреһен әйт”, “Аҡ, ҡара” һүҙҙәрен әйтмәçкә”, “Ниндәй материалдан?” “Миҙгелдең күршеләрен әйт” һ.б. уйындарын тәҡдим итергә була.

Шулай итеп, режим ваҡытында дидактик уйындарҙы киң ҡулланыу, балаларҙың логик фекерләү ҡеүәһен, аң зиһенен, уйлау һәләтен, ҡыҙыҡһыныуҙарын, хәтерҙәрен, иғтибарҙарын ғына түгел, ә телмәрен үçтереүгә лә әһәмиәте ҙур.

Дидактик уйындар балаларҙа үҙ-ара аралашыу ҡоралы һәм яҡшы мөнәсәбәттәр тәрбиәләү, шулай уҡ әхлаҡи һәм әҙәп ҡанундарына төшөндөрөү һәм улар менән бәйле булған ҡағиҙәләрҙе дөрөç үтәү, нығытыу ысулы булараҡ та ҙур урын алып тора.